## ЗАДАНИЯ ДЛЯ 10-11 КЛАССОВ
## ЧАСТЬ 1. БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК

**1 задание. *Әсе* һүҙе ҡайһы осраҡта күсмә мәғәнәлә ҡулланылған?**

1. Әсе ҡатыҡ
2. Әсе сейә
3. Әсе һут
4. Әсе яҙмыш

**2 задание. Һөйләмдәрҙең ҡайһыһында исем төшөм килештә килә?**

1. Икмәкте хурлама, ҙурла.
2. Изгелектең иртәһе-кисе юҡ.
3. Ат – туйған ерендә, егет – тыуған илендә.
4. Булыр бала биләүҙән билдәле.

**3 задание. Ҡайһы һөйләмдә сама һаны бар?**

1. Караптың дүрт мөйөшөндә - дүрт матрос.
2. Етеһендә ни булһа, етмешендә шул булыр.
3. Йөҙәрләгән күҙ Закирға төбәлгәйне.
4. Инде өсөнсө йыл һуғыш бара.

**4 задание. Төшөм йүнәлеше ҡылымдары бирелгән юлды күрһәтегеҙ:**

1. Һөйләй, йыуа, килә, китә, яҙа
2. Сабырһыҙлана, кейенә, биҙәнә

3. Кейелә, төҙәлә, биҙәлә, уҡыла
4. Эшләтә, яҙҙыра, көлдөрә

**5 задание.** ***Ҡапыл бабайҙың бала булғыһы, шул парталарға ултырып уҡығыһы, елкенеп-елкенеп һөйләгеһе килеп китте*** **һөйләмендәге ҡылымдар ниндәй һөйкәлеш ҡылымдары?**
1. Хәбәр һөйкәлеше
2. Шарт һөйкәлеше
3. Бойороҡ һөйкәлеше
4. Теләк һөйкәлеше

**6 задание. Теркәүестәрҙе күрһәтегеҙ:**
1. Шикелле, аша, хаҡта, һымаҡ
2. Үтә, иң, ифрат, ғына
3. Йәғни, йәнә, шуға, юҡһа
4. Тейеш, кәрәк, икән, бар

**7 задание.** ***Ах, ул Юшатыр буйҙары…*** **һөйләмендә аҫтына һыҙылған һүҙ ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?**
1. Теркәүес
2. Киҫәксә
3. Бәйләүес
4. Ымлыҡ

**8 задание.** ***Урман бында бик ҡалын*** **һөйләменең хәбәре ниндәй һүҙ төркөмөнән килгән?**
1. Сифаттан
2. Алмаштан
3. Рәүештән
4. Исемдән

**9 задание. Составында бүлеү теркәүесе булған һөйләмде билдәләгеҙ:**
1. Төн яҡынлап бара, әммә колхозсылар эшкә сығырға ашыҡмайҙар әле.
2. Улар әле береһен, әле икенсеһен бүлеп, шыбырлашып хәбәр һөйләйҙәр.
3. Мин дә юрый уның артынан тәгәрәгән булдым.
4. Иртән дә, көндөҙ ҙә, кис тә ул үҙ урынында ҡалды.

**10 задание. Теркәүестәрҙең төрөн билдәләгеҙ:** ***шуға, шуға күрә, шунлыҡтан.***
1. Сәбәп теркәүестәре
2. Шарт теркәүестәре
3. Йыйыу теркәүестәре
4. Һөҙөмтә теркәүестәре

**11 задание.** ***Ауылды үтеп, бер аҙ барғас, урман башлана*** **һөйләмендә аҫтына һыҙылған ҡылымдарҙың ҡайһыһы - хәл ҡылым, ҡайһыһы – хәбәр һөйкәлеше ҡылымы?**
1. *Үтеп, барғас* – хәбәр һөйк., *башлана* – хәл ҡылым.
2. *Үтеп, барғас* – хәл ҡылымдар, *башлана* – хәбәр һөйк.
3. *Барғас* – хәл ҡылым, *башлана, үтеп* – хәбәр һөйк.
4. *Үтеп, башлана* – хәбәр һөйк., *барғас* – хәл ҡылым

**12 задание.** ***Дуҫ-иш, аҙыҡ-түлек, аҡлы-ҡаралы, ер-һыу*** **һүҙҙәре нисек яһалған?**
1. Яһаусы ялғауҙар ярҙамында
2. Һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән
3. Һүҙҙәрҙе бәйләү юлы менән
4. Һүҙҙәрҙе парлау юлы менән

**13 задание. Тик һуҙынҡы өндән башланған һүҙҙәр булған юлды һайларға:**
1. Ялан, егет, ел, юл
2. Ил, ант, уң, өй, уй
3. Юрға, яңы, оя, эшмәкәр
4. Матур, йәш, гүзәл, күркәм

**14 задание.** ***Юлъяҙма*** **һүҙендә нисә тартынҡы, нисә һуҙынҡы өн бар?**
1. Бөтәһе лә һуҙынҡы
2. 3 тартынҡы, 3 һуҙынҡы
3. 4 тартынҡы, 3 һуҙынҡы
4. 5 тартынҡы, 3 һуҙынҡы

**15 задание. Хәбәр эйәрсәнле һөйләмдә ике нөктә ҡуйылған юлды билдәләргә:**
1. Кем эшләмәй (?) шул ашамай.
2. Шуныһы асыҡ (?) тау йылғаһы диңгеҙгә етмәйенсә туктамай.
3. Йәнә шуны өҫтәргә кәрәк (?) мин быйыл ғына уҡыуҙы тамамланым.
**4**. Дөрөҫ яуап юҡ.

**16 задание. Һүҙҙәр дөрөҫ яҙылған юлды табырға:**
1. Аҫрау, бысраҡ, ҡойроҡ, осрау, йомро
2. Аҫырау, бысыраҡ, ҡойороҡ, осорау, йоморо
3. Аҫрау, бысыраҡ, ҡойроҡ, осорау, йомро
4. Аҫырау, бысраҡ, ҡойороҡ, осрау, йоморо

**17 задание. Һыҙыкса аша яҙылмаған һүҙ нисәнсе юлда тора?**
1. Ағай эне
2. Уй фекер
3. Егет елән
4. Дөрөҫ яуап юҡ

**18 задание.** ***Тышта һалкынса, һауа шундай саф, иртәнге һүлпәнлекте, әйтерһең, ҡул менән һыпырып алып ташланылар*** **һөйләме нисә һөйләмдән тора?**
1. Өс
2. Дүрт
3. Ике
4. Биш

**19 задание** ***Нимә оҡшай (?) шуны йырла*** **һөйләмендә эйәрсән һөйләмдән һуң ниндәй тыныш билдәһе ҡуйыла?**
1. Ике нөктә
2. Һыҙыҡ
3. Өтөр
4. Тыныш билдәһе ҡуйылмай

**20 задание.** ***Башҡорттарҙың 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыуҙары хаҡында күп кенә тарихи документтар һаҡланһа ла, Ҡаһым түрә тураһында документтар бик аҙ.*** **Эйәрсән һөйләмдең төрөн билдәләргә**:

1. Шарт
2. Кире
3. Сағыштырыу
4. Тултырыусы

**21 задание.** ***Самолет килгәнде хәбәр иттеләр*** **һөйләменең төрөн билдәләргә:**

1. Ябай
2. Ике составлы
3. Бер составлы
4. Ҡушма

**22 задание. Эйәрсән һөйләм баш һөйләмгә нисек бәйләнгән:** ***Беҙ, хәрби ҡатын-ҡыҙҙар, Ләйлә тыуған көнөндә бер генә тапҡыр булһа ла кейеп ҡараһын тип, уға аҡ ситсанан бик матур күлдәк тектек.***

1. Бәйләүес ярҙамында
2. Теркәүес ярҙамында
3. Киҫәксә ярҙамында
4. Ялғау ярҙамында

**23 задание. Ҡайһы һөйләмдә ябай һөйләмдәр үҙ-ара эйәртеүле юл менән бәйләнгән?**

1. Тегеләр ҙә беҙҙе күрҙе, урындарынан торҙолар, боролдолар, ҡаса башланылар.
2. Кеше күҙендәге сүпте күргәнсе, үҙ күҙеңдәге бүрәнәне алып ҡуй
3. Кешене бер алдаһаң, ышанмаҫ.
4. Бик һағынған, күрәһең, һөйләп һүҙе бөтмәй.

**24 задание. Бирелгән ҡушма һөйләмдә нисә ябай һөйләм бар:** ***Ахыр Емеш иҫенә килде, күҙен асты, берсә ул еңгәһенә ҡараны, берсә Байрасы, уға ҡарап, тәрән итеп тын алды.***

1. Ике
2. Өс
3. Дүрт
4. Был ябай һөйләм.

**25 задание. Урын хәле булған һөйләмде күрһәтегеҙ:**

1. Далала төрлөһө була.
2. Ыҙғыр көҙ етте.
3. Ҡуян булып ҡасҡансы, ыласын булып үлеү артығыраҡ.
4. Һөйәктәргә тиклем өшөгән бар, election

## ЧАСТЬ 2. БАШКИРСКАЯ ЛИТЕРАТУРА

**1 задание. Саңды үҙәк", "Малбай", "Бүҙекәй кантон", "Юлтый ҡараҡ" йырҙарының авторын атағыҙ.**

1. Ишмөхәмәт сәсән
2. Буранбай сәсән
3. Байыҡ Айҙар сәсән
4. Ғәбит сәсән Арғынбаев

**2 задание. 1858 йылда элекке Ырымбур губернаһы Үрге Йайыҡ өйәҙе Тамъян-Түңгәүер олоҫо (хәҙерге Әбйәлил районы) Әбделғәзе ауылында тыуған әҙипте атағыҙ.**

1. Нурмөхәмәт Йомрани
2. Ғарифулла Кейеков
3. Шафиҡ Әминев Тамъяни
4. Фәтхелҡадир Сөләймәнов

**3 задание «Салауаттан һорау алыу», «Шәриғәт ҡорбандары» картиналарының авторҙарын атағыҙ.**

1. Ә.Ф.Лотфуллин, И.И. Шишкин
2. А.А.Кузнецов, И.К. Айвазовский
3. М.А. Врубель, Ә.Ф.Лотфуллин,
4. А.А.Кузнецов, Р.М.Нурмөхәмәтов

**4 задание Түбәндә бирелгән ҡайһы һүрәтләү саралары поэтик синтаксисҡа ҡарай?**

1. риторик өндәү, риторик һорау, ҡабатлау
2. антитеза, инверсия
3. инверсия һәм эллипсис
4. үрҙә һаналғандарҙың барыһы ла

**5 задание. Ғәббәс мулла, Ғәйшә абыстай, Йософ бабай һ.б. геройҙары булған әҫәрҙе билдәләгеҙ.**

1. М.Ғафури. “Ярлылар йәки өйҙәш ҡатын” повесы
2. Д.Юлтый. “Әлимә йәки Мырҙаш ҡарт туйы” повесы
3. Риза Фәхретдинов. “Әсмә” повесы
4. Риза Фәхретдинов. “Сәлимә” повесы

**6 задание. Сюжетниндәй элементтарҙы үҙ эсенә ала? Дөрөҫ яуапты билдәләгеҙ.**

1. экспозиция, ваҡиғалар үҫеше һәм сиселеш.
2. төйөнләнеү, ваҡиғалар үҫеше, кульминация һәм сиселеш
3. кульминация һәм сиселеш.
4. экспозиция, төйөнләнеү, ваҡиғалар үҫеше, кульминация һәм сиселеш.

**7 задание. Түбәндәге әҫәрҙең һуңғы юлында төшөп ҡалған һүҙҙе билдәләгеҙ.**

*Күктә – Алла,*
*Ерҙә – Иблес,*
*Мин – малай.*
*Береһе: “Дин! - тип,*
*Береһе: “Мин!”- тип*
*Тартҡылай.*
*Белмәйем,*
*әллә Алла,*
*әллә Иблес?!*

1. Тартҡылай
2. Алдалай
3. Юхалай
4. Мыҫҡыллай

**8 задание. Салауат Юлаев тураһында опера яҙған башҡорт композиторы кем?**

1. Хөсәйен Әхмәтов

2. Заһир Исмәғилев
3. Нариман Сабитов
4. Мәсәлим Вәлиев

**9 задание. Башҡорт драматургияһында *музыкаль комедия* жанрына нигеҙ һалыусы яҙыусыны атағыҙ**.

1. Дауыт Юлтый
2. Мөхәмәтша Буранғолов
3. Хәбибулла Ибраһимов
4. Мостай Кәрим

**10 задание. Бирелгән тексты иғтибар менән уҡығыҙ. Был монолог кем – *ҡайһы образ* ауыҙынан әйтелә?**

*Шулай ҙа мин*
*Семьялар ҡороуға ҡаршымын,*
*Бальзак кеүек, яңғыҙ ҡартайыуы,*
*Минеңсә, иң яҡшыһы...*
*...Семьянан да элек беҙҙең илгә*
*Герой кәрәк, данлы кешеләр,*
*Ә үндайҙар, иптәш,*
*Тыумай тар семьялар эсендә.*

1. Сәйҙел монологынан өҙөк.  “Бала” поэмаһы. Ғ.Сәләм.
2. Әршиттең монологынан.  “Бала” поэмаһы. Ғ.Сәләм.
3. Яҡуптың һүҙҙәре. “Ҡара һыуҙар” поэмаһы. М.Кәрим.
4. Фәтхел тарафынан. “Һаҡмар ҡыҙы” поэмаһы. Р.Ниғмәти.

**11 задание. Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның *трилогияһы* нисек атала?**

1. Емеш
2. Кәмһетелгәндәр
3. Оло Эйек буйында
4. Яҡтыға

**12 задание. Бирелгән өҙөк кемдең ниндәй әҫәренән алынған?**

*“- Тарих менән ҡыҙыҡһына торған егет булып сыҡтың һин, ҡустым. Бына һәйбәт, бик һәйбәт. Юҡһа ҡайһы бер йәштәр, донья улар үҙҙәре тыуғас ҡына башланған, тип уйлайҙар, күрәһең, иҫке менән, үткән менән бер ҙә ҡыҙыҡһынмайҙар...”. Был юлдар кемдең ниндәй әҫәренән иҡәнлеген әйтегеҙ.*

1. С.Агиштың “Фәтхи һалдат” хикәйәһенән
2. Һ.Дәүләтшинаның “Айбикә” повесынан
3. З.Биишеваның “Һөнәрсе менән Өйрәнсек” хикәйәтенән
4. З.Биишеваның “Мөхәббәт һәм нәфрәт” хикәйәтенән

**13 задание. Д.Юлтыйҙың “Ҡан” романының төп геройҙары бирелгән дөрөҫ вариант ҡайһыныһы?**

1. Булат, Индрил, Байыҡ, Цыганов, Буранбай
2. Булат, Байғужа, Буранбай, Новиков, Индрил
3. Билал, Салих, Байғужа, Ҡаһым, Новиков
4. Иванов, Индрил, Фәтих, Иванов, Буранбай

**14 задание. Поэзияла (шиғриәттә) шағирҙың үҙе йәки берәй кеше исеменән һүҙ алып барған шәхесте кем тип атайҙар?**

1. лирик субъект
2. лирик герой
3. хикәйәләүсе
4. автор

**15 задание. Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең Ҡөрьәнде аңлатып биргән үҙ һүҙҙәрен, дини йолалар хаҡында әйткәндәрен, тапҡыр һүҙҙәрен нимә тип йөрөтәләр?**
1. мөнәжәттәр
2. бәйеттәр
3. хәҙистәр
4. легенда һәм риүәйәттәр

**16 задание. Халыҡтың үткән тарихын йыйнаҡ һәм йәнле итеп һөйләп биргән, тарихи мәғлүмәттәргә бай булған хикәйәләрҙе нимә тип атайҙар?**
1.тарихи хикәйә
2. хикәйәт
3. хикмәт
4. ҡисса

**17 задание.*“Дүрт батырҙың береһе яугир ҡатын булыуы тураһында хәбәр алғандан һуң, Хандың асыуы ҡыҙыҡһыныу менән алмашынды. Яугир ҡатынды үҙ эргәһенә индерергә ҡушты”.* Был өҙөк кемдең ниндәй әҫәренән алынған?**
1. Илгизәр Бураҡаевтың “Башҡорт көсө” хикәйәте
2. Ғ.Хөсәйеновтың “Батырша” романынан
3. З.Биишеваның “Тылсымлы ҡурай” драматик поэмаһынан
4. Ә.Хәкимовтың “Өйөрмә” романынан

**18. задание 1944 йылда Башҡортостандың Мәләүез районы Арыҫлан ауылында донъяға килгән әҙиптең исемен атағыҙ**.
а) Марат Кәримов
б) Әхиәр Хәкимов
в) Динис Бүләков
г) Рәшит Солтангәрәев

**19 задание. Ҡол Ғәлиҙең “Ҡисса-и Йософ” әҫәре ҡайһы быуатҡа ҡарай?**
1.IX
2. XII
3. XIII
4. XV

**20. задание. Боронғо әҫәрҙәрҙең ҡайһыныһында кеше ғүмере, йәшәү мәғәнәһе, ғаилә татыулығы, ата-әсәләр менән балалар араһындағы мөнәсәбәт, хеҙмәткә баһа, батшаны мәрхәмәтле итер сифаттар, феодаль дәүләт ҡоролошо, ил менән етәкселек итеү, аҡыл, белем, һуғыш һәм тыныслыҡ һ.б. тураһында фекер йөрөтөлә?**
1. “Ҡорҡот ата” хикәйәтендә
2. Йософ Баласағуниҙың “Ҡутадғу билиг” әҫәрендә
3. Ҡол Ғәлиҙең “Йософ ҡиссаһы” поэмаһында
4. “Урал батыр” эпосында

**21 задание. “Иҙеүкәй менән Мораҙым” эпосында, шулай уҡ Әхиәр Хәкимовтың “Думбыра сыңы” романында тасуирланған сәсән кем?**
1. Аҡмырҙа

2. Ҡаҙтуған
3. Һабрау
4. Буранбай

**22 задание.Айырым кешеләрҙәге, тормоштағы етешһеҙлектәрҙе, тиҫкәре күренештәрҙе аяуһыҙ фашлап, әсе итеп мыҫҡыллап көлөү нимә тип йөрөтөлә?**

1. юмор
2. ирония
3. сарказм
4. сатира

**23 задание. М.Кәримдең халыҡ-ара тематиканы яҡтыртыусы “Вьетнам яҙмалары”, “Каштан сәскә атҡан ерҙә”, “Болғар дәфтәренән” әҫәрҙәре ниндәй жанрға ҡарай?**

а) сәйәхәтнәмә
б) очерк
в) поэма
г) шиғри циклдар

**24 задание. Айырым һүҙҙәргә иғтибарҙы йүнәлтеү һәм һүҙҙәрҙең тойғолологон көсәйтеү өсөн, һүҙҙәрҙе ғәҙәттәге тәртибенән үҙгәртеп урынлаштырыу әҙәбиәт ғилемендә нисек атала?**

1. градация
2. антитеза
3. анафора
4. инверсия

**25 задание. Яҙыусының әҫәрҙә үҙе һүрәтләгән ваҡиғаларға мөнәсәбәтен белдереүсе, әҫәр сиселешенән аңлашыла торған образлы фекер нимә тип атала?**

1. әҫәрҙең темаһы
2. әҫәрҙең идеяһы
3. автор позицияһы
4. әҫәрҙең проблемаһы